(1932



1977)

# Рәми Ғариптовтың тормош юлы һәм ижады

Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов 1932 йылдың 12 февралендә Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында колхозсы ғаиләһендә донъяға килә.






Гөлмәрйәм апай һәм Йәғәфәр ағай Ғариповтар

1946 йылда Өфөгә килеп, 9-сы башҡорт мәктәбенә уҡырға инә. Фронтта аталары һәләк булған балалар өсөн асылған был мәктәптең интернатында тәрбиәләнә.



Рәми – интернат уҡыусыһы



Башҡортостан Яҙыусылар союзы тәҡдиме буйынса, 1950 йылда Мәскәүгә барып, М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға керә.

Рәми Ғарипов 1955 йылдан «Совет Башҡортостаны» гәзитендә эшләй башлай. Унда әҙәби хеҙмәткәр һәм бүлек мөдире вазифаларын башҡара. Бер нисә йыл Башҡортостан китап нәшриәтендә һәм «Ағиҙел» журналы редакцияһында эшләп ала.

# Шағирҙың ғаиләhе



Надя апай, Рәми ағай һәм өлкән улдары Салауат бәләкәй саҡта.



Шағирҙың ғаиләһе. Һулдан уңға: улы Азамат, ҡатыны Надежда Васильевна, ҡыҙы Гөлнара, Рәми Ғарипов һәм улы Салауат

Рәми Ғариповтың матбуғатта сыҡҡан беренсе әҫәре— 1950 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында баҫылған “Ленин” тигән шиғыры. Әҙәбиәт институтында диплом эше булған тәүге китабы — “Йүрүҙән” исемле шиғырҙар йыйынтығы 1954 йылда донъяға сыға һәм матбуғатта ыңғай баһа алды.

Рәми Ғариповтың Тыуған иле, туған халҡы, туған теле, халыҡ тарихы һәм киләсәге тураһындағы «Урал йөрәге», «Салауат батыр» хикәйәттәре, «Уйҙарым», «Аманат» ҡобайырҙары халыҡса тапҡыр мәғәнәлектәре, эпик ҡоролоуҙары менән иғтибарҙы биләй, шағирҙың фольклор жанрҙарын ижади файҙаланыу оҫталығын күрһәтә.

**Башҡорт теле.**

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да - йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел-
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел.

Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөйməҫ кенә телен һөйmәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә - сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Был шиғыры өсөн Рәми Ғариповты Яҙыусылар союзы ағзалығынан сығаралар

# Ул уҡыған башҡорт мәктәп интернатына Рәми Ғарипов исеме бирелде.



# Рәми Ғариповтың тыуған ауылы Арҡауылда уның йорт – музейы асылды.



Рәми Ғарипов йәшәгән йортта таҡтаташ асыу